МИНИСТЕРСТВО ОБРАЗОВАНИЯ
РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН
ГОСУДАРСТВЕННОЕ ОБРАЗОВАТЕЛЬНОЕ УЧРЕЖДЕНИЕ
СРЕДНЕГО ПРОФЕССИОНАЛЬНОГО ОБРАЗОВАНИЯ
«ТУЙМАЗИНСКИЙ ПЕДАГОГИЧЕСКИЙ КОЛЛЕДЖ»



# Байлығым һин, изге һөнәрем...

«Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы – 2008» республика конкурсы финалисы Кәримова Г.Я эше тәжрибәһенән

Туймазы, 2010

Филология фәндәре ПЦК-һы
тарафынан раҫланды
Протокол №
ПЦК рәйесе______Кәримова Г.Я.

Төҙөүсе: *Кәримова Г.Я.*, юғары категориялы башҡорт теле уҡытыусыһы

Рецензенттар: *Латыпова И.А.*, филология фәндәре кандидаты, юғары категориялы татар теле уҡытыусыһы,

*Бикбулатова Г.Й.*,Туймазы ҡалаһы 6-сы һанлы мәктәбенең юғары категориялы башҡорт теле уҡытыусыһы

## Йөкмәткеһе

**1. Аңлатмалы һүҙ**....................................................................................4

**2. Развитие творческих способностей студентов.** Концепция преподавателя башкирского языка Каримовой Г.Я…………………………………..5

3. **Башҡорт** ***теле буйынса фәнни йәмғиәт менән эшләү тәжрибәһенән.*** *Кәримова Г.Я*....................................................................................*9*

4. ***Балалала туған телгә һөйөү үҫтереүҙә әсәйҙәрҙең роле*****....................*10***

***«Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы – 2008» республика конкурсы буйынса материалдар.***

**5.** ***Атайыма хат.*** Кәримова Гөлнара Яхъя ҡыҙының **педагогик фәлсәфәһе**....................................................................................15

**6.** ***Тормош юлдары ҡатмарлы...*** Н. Асанбаевтың «Рәйсә» һәм «Фәйзи» драмалары буйынса башҡорт әҙәбиәте дәресе.........................................20
.

7.***«Караңғыла фонарҙы ҡабыҙған ул...»*** М. Акмулла тормошо һәм ижады буйынса балалар әҙәбиәте дәресе.................................................26

**8.*****Йәнлектәр һәм үҫемлектәр доньяһында****. Башҡорт теле дәресе..........32*

**9. «Йөрәгендә халҡы булмағандың Кеше булырға ла хаҡы юҡ»**……...37
***(Р. Ғарипов).*** *Алдан әҙерләнмәгән (импровизациялы) дәрес*

## Аңлатмалы һүҙ

Бөгөн үҙ эше менән янып йәшәгән кешеләргә ижади офоҡтар киңәйҙе. Йәш йәки оло булыуына ҡарамаҫтан, һәр һөнәр эйәһе төрлө сараларҙа ҡатнашып, үҙенең профессиональ кимәлен күтәреү, тәжрибәһе менән уртаҡлашыу хоҡуғына эйә. Бына, мәҫәлән, «Йыл уҡытыусыһы» конкурсы уҡытыусы һөнәре эйәләренә аралашыу, алдынғы уҡытыу алымдарын өйрәнеү өсөн ҙур тәжрибә майҙаны булып тора.

Әммә сараларҙа ҡатнашыр өсөн уҡытыусынан күслө әҙерлек, иҫ киткес сыҙамлыҡ менән бергә үҙ эшенде яратыу талап ителә. Ошондай һығымтаны мин урта профессиональ уҡыу йорттары педагогтары араһында тәүге тапҡыр ойошторолған «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы – 2008» республика конкурсында ҡатнашыуҙан һуң яһаным. Сара барышында байтаҡ эштәр башҡарылды. Һөҙөмтәләрен методик ҡулланма рәүешендә йәш уҡытыусыларға, конкурста көс һынашырға теләүселәргә тәҡдим итәбеҙ. Методик хеҙмәткә төрлө осорҙарҙа һәм конкурс барышында үткәрелгән дәрестәр, презентациялар, педагогик фәлсәфә, импровизациялы дәрес индерелде.

Текстар брошюрала, ә презентациялар электрон вариантта һәр дәрес тексынан һуң ҡуйылды. Бында «М. Аҡмулла», «Йәнлектәр һәм хайуандар донъяһында», «Минең педагогик фәлсәфәм», импровизациялы дәрес өсөн презентациялар тәҡдим ителә. Презентациялағы слайд һаны текстарҙа күрһәтелә.

«Йәнлектәр һәм үҫемлектәр доньяһында» дәресе башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡыусы төркөмдәргә тәғәйенләнә. Ҡалған дәрестәр башҡорт телен туған тел тип һанаған студенттар менән ойошторолдо. Урта профессиональ уҡыу йорттарында, мәктәптәрҙә эшләүсе уҡытыусылар был хеҙмәттән файҙалы мәғлүмәт табыр тип ышанабыҙ.

# Развитие творческих способностей студентов

***Концепция преподавателя башкирского языка Каримовой Г.Я.***

*Когда я говорю быть творческим,*
*я не имею в виду, что вы должны*
*пойти и стать великими художниками*
*и великими поэтами. Я просто имею в виду:*
*пусть ваша жизнь будет картиной,*
*пусть ваша жизнь будет стихотворением.*
*Ошо*

*Если слава случается, хорошо.*
*Если ее не случается, хорошо.*
*Это не должно быть критерием.*
*Критерием должно быть,*
*наслаждаешься ли ты тем,*
*что ты делаешь.*
*Это твой любовный роман.*
*Ошо*

Увеличивающиеся с каждым годом сложность и масштабы проблем, встающих перед обществом в новом столетии, ставят перед отечественной системой образования задачу не только формирования эрудированного ученика, но и креативной личности.

В современных условиях творческая личность становится востребованной обществом на всех ступенях ее развития. Количество изменений в жизни, происходящих за небольшой отрезок времени, настоятельно требуют от человека качеств, позволяющих творчески и продуктивно подходить к любым изменениям. Для того, чтобы выжить в ситуации постоянных изменений, чтобы адекватно на них реагировать, человек должен активизировать свой творческий потенциал. Таким образом, возникает противоречие между репродуктивным характером традиционно сложившейся системы обучения и насущной потребностью общества в креативной системе развития личности.

Слово "творчество" происходит от слова "творить", т.е. в общественном смысле это означает "искать", изобретать и создавать нечто такое, что не встречалось в прошлом опыте - индивидуальном или общественном. В психолого-педагогическом определении творчества отражается момент субъективной значимости этого процесса, т.е. творчество есть деятельность, способствующая созданию, открытию чего-либо неизвестного для данного субъекта. Творчество — это исследование. Студент исследует, а это значит, что он наблюдает и познает окружающий мир. Поисковая творческая деятельность создает все материальные и духовные ценности. Элементы творчества на уроках башкирского языка и литературы могут присутствовать в самых различных видах и формах деятельности учителя и ученика: в характере и

содержании, запланированных к уроку, познавательных задач; в совместной организации уроков и внеклассных мероприятий, создании творческих проектов, через включение в систему творческого соперничества (олимпиады, конкурсы, выставки и соревнования) и т.д. В основе творчества лежит система творческого воспитания, которая обусловлена двумя основными принципами:

- индивидуальной заинтересованностью;
- социальной значимостью.

Исследования показывают, что творческие способности присущи любому человеку, любому нормальному ребенку, только нужно вовремя их раскрыть и развить. Элементы творчества проявляются и в решении повседневных жизненных задач, в обычном учебном процессе, они проявляются в самостоятельности личности. Ориентируясь на сотрудничество, педагогу важно совершать необходимые действия для обеспечения психологической готовности студентов как субъектов совместной деятельности. "Педагогика сотрудничества предусматривает отказ педагога от представления о себе как центральной фигуре учебного процесса, наличие у него способности поставить своя на место другого (идентификация), умения понимать внутреннее состояние и переживания другого (эмпатия) (Ушинский К.Д.).

Какие же новообразования, характеризующие творческий уровень развития, должны появиться у студентов, изучающих башкирский язык и литературу? Назовем только самые главные:

- умение правильно отобрать и применить знания, действовать в нестандартной ситуации; самостоятельность и инициативность;
- умение осознавать свое незнание, находить причину сделанной ошибки сравнивать результаты своей деятельности с эталоном, самостоятельно оценивать процесс: результат решения учебной задачи;
- умение найти общий способ построения учебной задачи (в рамках изучения нового материала), умение и желание выполнить любую задачу творчески;
- высокий (в соответствии с возможностями) уровень психических процессов, особенно важных для деятельности учения: воображения, мышления, связной речи и др. Но реализация этих положений осуществляется только при условии, когда обучение-построено как процесс "открытия" каждым студентом конкретного знания, а не как "натаскивание" его на решение типовых задач.

Студент не должен в готовом виде принимать знание, деятельность его на уроке должна требовать от него усилия, размышления, поиска.Студент должен иметь право на ошибку, на коллективное обсуждение поставленных гипотез, выдвинутых доказательств, анализ причин возникновения ошибок и неточностей. Такой подход делает "личностно значимым" и мотивированным процесс учения.

Таким образом, способности выступают и как предпосылка усвоения знаний, умений и навыков и отчасти как результат и критерий уровня обучаемости.

В итоге творческих поисков эффективности форм и методов работы, их дальнейшего усовершенствования, мы пришли к выводу, что одной из форм реализации данных задач и активизации познавательной деятельности учащихся

являются личностно-ориентированные технологии.

В своей работе (при обучении) мы руководствуемся тремя основными задачами педагога, известными в практике:

- включение учащихся в самостоятельную познавательную деятельность (организация учебной деятельности гимназистов);
- обеспечение эмоциональной поддержки обучающихся, создание каждому ученику ситуации успеха на основе применения индивидуальных эталонов оценивания;
- проведение экспертизы полученного результата, как педагогом, так и учениками.

Основные условия эффективности развития творческих способностей студентов является разумная организация на уроках индивидуально-дифференцированной работы, которая включает в себя следующие направления:

1. учет потенциальных возможностей студентов;
2. сочетание различных форм обучения
3. использование современных педтехнологий;
4. активизация организационно-консультативных функций урока;
5. использование дидактико-методической базы
6. применение в учебном процессе методов, способствующих развитию у учащихся логического мышления, инициативы, активности и самостоятельности;
7. включение элементов исследования в различные виды учебной деятельности учащихся;
8. приобщение к конструированию, изобретательству и рационализаторству на уроках и внеклассных занятиях;
9. организация индивидуальных творческих заданий;
10. развитие интереса к научным знаниям и способностей к исследовательской работе.

Важно формировать мотивы учения как побудительную силу учебной, деятельности, чтобы студенты получали радость от каждого учебного действия, будь то выразительное чтение, анализ стиха, ролевая игра или интервью, дискуссия или диалог.

Обучение творчеству студентов на уроках башкирского языка и литературы — это вооружение учащихся умением осознавать проблему, намеченную учителем, а позднее формулировать ее, выявляя скрытые вопросы; это развитие способностей выдвигать гипотезы и соотносить их с условиями задачи, осуществляя поэтапную и итоговую проверку решения несколькими способами.

В самостоятельном поиске студентов, организованном учителем, формируется познавательный интерес, высокая активность. Сильное воздействие на внутренний мир оказывают те мысли и чувства, которые рождаются в процессе его собственной речевой деятельности. Именно во время мотивированных мыслительных действий учащийся особенно хорошо уясняет смысл получаемой и полученной ранее информации и дает ей определенную оценку. Поэтому продуктивны такие творческие уроки, как уроки-беседы, диспуты на проблемные темы.

На уроках литературы можно использовать следующие виды творческих заданий:

1. Задания, связанные непосредственным изучением материала, ориентированные на творческое восприятие художественного текста.

2. Задания, связанные с дополнительной литературоведческой, искусствоведческой или исторической информацией. Это могут быть разного рода доклады (на темы, требующие творческого подхода), сравнение различных текстов или творческое осмысление элементов теории литературы.

3. Задания, связанные творчеством самих учащихся: их исследования» научные разработки, сочинения, попытки создания собственных произведений по заданному сюжету, на заданную тему, в заданном жанре или попытки стилизации.

Задачам формирования творческой личности служит научное общество как добровольное объединение студентов, стремящихся совершенствовать свои знания в определенной области науки, искусства, приобретать умения и навыки научно-исследовательской деятельности.

Студенческое научное общество. «Башкирский язык в школах с русским языком обучения» ставит следующую цель: способствовать развитию научно-исследовательской деятельности студентов, создавать условия для самоопределения, самореализации.

К основным направлениям работы СНО мы относим:

1. Вовлечение в научно-исследовательскую деятельность студентов в соответствии с их интересами и склонностями.

2. Получение учащимися библиографических знаний, умений работать с научной литературой, формирование культуры научного исследования.

3. Подготовка и проведение научных конференций, «круглых столов», участие в студенческих научно-практических конференциях.

4. Развитие творческой деятельности учащихся - членов студенческого научного общества в ходе подготовки и проведения предметных вечеров, недель и др.

5. Сотрудничество студентов научного общества с общеколледжным научно-методическим журналом «Советник». Создание в дальнейшем своих научных сборников.

6. Использование исследовательского материала- членов научного общества студентами других групп, а также практическое применение на пробных уроках по башкирскому языку.

7. Сотрудничество с учителями башкирского языка школ г. Туймазы и Туймазинского района (совместные круглые столы).

8. Работа пресс-службы студенческого научного общества: выпуск газет, видеосъемки уроков, конференций, интервью и др.

**Башҡорт теле буйынса фәнни йәмғиәт менән эшләү тәжрибәһенән**
*Кәримова Г.Я. “Башҡортостан уҡытыусыһы“журналында сыҡҡан мәҡәлә ”*

Бөгөнгө көндә башҡорт теле, туған тел һәм дәүләт теле буларак, бөтә мәктәптәрҙә лә өйрәнелә. Был, һис шикһеҙ, ыңғай күренеш. Әммә һәр яңылыҡ үҙенә күрә яңы ауырлыҡтарҙы ла өҫтәй: төрлө дәреслектәр, методик ҡулланмалар, күргәҙмә әсбәптәр һ.б. кәрәк. Тел дәрестәре мәктәптә уҡытылған башҡа предмет буйынса дәрестәрҙән һис тә ҡайтыш булмаҫҡа, бөгөнгө көн талаптарына яуап бирерлек итеп ойошторолорға тейеш. Шулай ҙа иң мөһиме – уҡытыу урыҫ телендә барған мәктәптәрҙә башҡорт теленә өйрәтеү серҙәрен яҡшы белгән уҡытыусыларҙың булыуы шарт.

Беҙҙеңсә, уҡыу йорттарында уҡ студенттарҙы бындай мәктәптәрҙә лә тел һәм әҙәбиәт дәрестәрен үткәреү методикаһы менән таныштырырға кәрәк.

Ошо маҡсатты күҙ уңында тотоп, беҙ бер-нисә йыл элек үҙебеҙҙең Туймазы педагогия колледжында башҡорт теле буйынса студенттарҙың фәнни йәмғиәтен ойошторҙоҡ. Ойошманың ағзалары рус мәктәптәрендә башҡорт теле дәрестәрен үткәреү үҙенсәлектәрен үҙләштерәләр: башҡорт, рус, татар, инглиз, немец телдәрен уҡытыу буйынса фәнни һәм методик хеҙмәттәрҙе өйрәнәләр, башҡорт теле дәрестәрендә ҡулланырға мөмкин булған метод һәм алымдарҙы тикшерәләр. IV курс студенттары практика барышында отошло тип табылған эш төрҙәрен, алымдарҙы ҡулланып, әһәмиәтен күрһәтәләр, эш һөҙөмтәләренә таянып методик кәңәштәр төҙөйҙәр һәм фәнни йәмғиәт ойошторған конференцияларҙа сығыш яһайҙар. Йәмғиәттең алдында шулай уҡ студенттарҙы ғилми-тикшеренеү эшенә йәлеп итеү, уның методикаһы менән таныштырыу, ғилми һәм методик хеҙмәттәр менән эшләү күнекмәләрен алыу барышында фәнни культура тәрбиәләү, уларҙың ижади һәләттәрен үҫтереү кеүек яуаплы бурыстар тора.

Йәмғиәттең ағзалары һәр йыл һайын билдәле бер тема буйынса эшләй. Быйыл «Уҡытыу урыҫ телендә барған мәктәптең башҡорт теле дәрестәрендә уйын технологияларын ҡулланыу» темаһын ҡыҙыклы тип таптыҡ һәм шуны өйрәндек.

Бөгөнгө көндә бөтә предметтар буйынса ла тиерлек уҡытыусылар уйын методына мөрәжәғәт итәләр. Беҙҙе сит телдәр уҡытыу методикаһы йәлеп итте. Сөнки был өлкәлә эшләүсе методистар уйындарға уҡыусыларҙы һөйләшергә өйрәтеүсе, балаларҙың

коммуникатив активлығына ыңғай йоғонто яһаусы сара итеп ҡарайҙар.

Студенттар, төркөмдәргә бүленеп, «Лексик һәм грамматик уйындар», «Сюжетлы уйындар», «Уйындарҙа телевизион тапшырыу материалдарын ҡулланыу», «Ролле уйындар», «Эшлекле уйындар», «Дәрес-уйындарҙа уҡыусыларҙың танып белеү эшен ойоштороу кеүек темалар буйынса тикшеренеү ойоштorҙолар. Уларҙың фекеренсә, башҡорт теле дәрестәрендә уйындар ҡулланыуҙың ыңғай яҡтары күп: уйын уҡыусыларҙың танып белеү процесын активлаштыра, тел һәм психологик барьерҙы еңергә ярҙам итә, ижади һәләттәрҙе үҫтерә, предметҡа ҡарата ҡыҙыҡһыныу уята, телде практик үҙләштереүгә булышлыҡ итә.

## *Балалала туған телгә һөйөү үҫтереүҙә әсәйҙәрҙең роле*

> **Бәпләп – әрләп тел менән**
> **Кеше иткән инәбеҙ,**
> **Эшле иткән инәбеҙ...**
> **Р. Ғарипов.**

Туған теленде белеү – тормошобоҙҙоң ҡануны, иң ябай хәҡиҡәте. Телһеҙ халыҡтың иле лә, киләсәге лә юҡлығын тарих үҙе иҫбатлай. Ә туған телде юғалтмауҙа, үҫтереүҙә ҡатын–ҡыҙҙың, әсәнең роле ҙур.

Ғөмүмән, тарихтың ҡайһы ғына дәүерен алып ҡараһаң да, ҡатын–ҡыҙҙың рухи һәм физик көсө – милләтте үҫтереүсе көс. Уның ғөрөф-ғәҙәттәрен, телен, динен ҡурсалаусы илаһи сығанаҡ, бер ниндәй ғәрәсәттәргә лә бирешмәгән, ҡоромаған йәншишмә ул. Һәр осорҙа ла кешелектең гүзәл яртыһы үҙ Ватанын, халҡының яҙмышын мәрхәмәтле ҡанаты аҫтына ала. Шуның менән бөйөклөгөн, илаһилығын раҫлай, милләттең ысын йөҙөн, тарихи асылын донъяға таныта.

Бөйөк башҡорт профессоры Ж.Ғ.Кейекбаевтың тел тураһында ошондай һүҙҙәре бар: «Тел кешеләр өсөн фекер алышыу һәм уҙ ара аңлашыуға ирешеү функцияһын башҡарыу менән бергә, бик боронғо замандарҙан алып йәш быуынды дөйөм кешелек рухында тәрбиәләү һәм уға өгөт-нәсихәт биреү хеҙмәтен дә үтәгән. Тормош-көнкүреш тәжрибәһенән алынып, оло быуын тарафынан урынлы әйтелгән тапҡыр йәки тормошсан өгөт-нәсихәт, йөкмәткеле хикәйә йәки быуын күңелендә һәр ваҡыт тәрән эҙ ҡалдырыр булған, уның психикаһына ыңғай тәьсир ҡалдырыр булған»[1]. Ә туған телдә өгөт-нәсихәт биреүсе, йәш быуынды тәрбиәләү вазифаһын тормошобоҙҙа иң беренсе

нәүбәттә әсә кеше, ҡатын-ҡыҙ башҡарған.

Бала тыуғас та әсә, кендек инәһе. өләсәй, апай, еңгә, инәйҙәр, йәғни ҡатын-ҡыҙҙар дөнъяһына барып ингән. Ҡатын-ҡыҙ уның кендеген ҡырҡҡан, кәүҙә-ҡиәфәте матур булһын тип тырышҡан, ауырып китһә, им-том иткән. Тәүге риҙыкты, тәүге мунсаны ла бала әсә йәки башҡа ҡатын-ҡыҙҙар ҡулынан татый. Йәмғиәткә лә бала тәүҙә уны күрергә, уның менән танышырға килгән ҡатын-ҡыҙ бала-саға тарафынан ҡабул ителә. Әсәһе, өләсәһе аша бишек йырҙары аша уға тел, моң бирә. Әсә һөтө менән балаға холоҡ, һаулыҡ, рухи байлыҡ, күңел тыныслығы һалына. Әсә, башҡа ҡатын-ҡыҙҙар, бала-сағалар менән бергә сабый йәй, яҙ, көҙ, ҡыш үткәрелгән Нардуған, Науруз, Ҡарға бутҡаһы, кәкүк сәйе кеүек миҙгел йолаларында ҡатнаша. Шулай итеп ҡатын кеше балаға үҙ туған телендә йолалар аша быуаттар буйы тупланған рухи байлыкты, белемде, донъяға ҡарашты тапшыра, әхлаҡ нормаларын һала. Ә бала атаһы һәм әсәһе эргәһендә эшкә. ғөрөф-ғәҙәткә әхләҡкә өйрәнә. Әсәһенең, өләсәһенең бишек йырҙарын, әкиәттәрен, алғыштарын, риүәйәттәрен күңеленә һендереп үҫкән бала киләсәктә быуындар бәйләнешен булдырыусы, халыҡтың күңел байлығын тапшырыусы, башҡортлоҡто һаҡлаусы көскә әүерелә.

Шулай итеп, әсә балаға ғүмер биреүҙә, уны ҡурсалауҙа, тәрбиәләүҙә ғаиләлә төп роль уйнаған. Шул уҡ ваҡытта әсә элек-электән милләттең ҡурсалаусыһы ла булып торған. Быуаттар төпкөлөнән килгән телде, тел аша рухи байлыкты, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, йолаларҙы ул яңы быуынға тапшырып, халыкты халыҡ итеп һаҡлауҙа төп роль уйнаған, башҡорттоң башҡортлоҡ сифаттарын да бөгөнгө көнгә килтереп еткергән.

[1]*Кейкбаев Ж. Әсә теле — мәктәптә тәрбиә ҡоралы.// Башҡортостан уҡытыусыһы. 1966 – №1.*

Элек-электән бала үҙ телендә әсәһенән, өләсәһенән үҙ телендә иң матур яратыу һүҙҙәрен ишеткән, сәңгелдәк йырҙарына әүерәгән, әкиәт, риүәйәт, легендалар тыңлап, рухы үҫкән, мәҡәл-әйтем. Йомаҡтар менән фекерләү ҡеүәһе артҡан, теле аша йәшәйеш серҙәренә төшөнгән һәм Тыуған иленең ысын улы булып үҫкән, хатта йәнен-тәнен йәлләмәй, алыштарға күтәрелгән.

Шағир Рәми Гариповтың «Аманат» ҡобайырында ла ошондай фәһемле юлдар бар:

Бәпләп-әрләп тел менән
Кеше иткән инәбеҙ,
Эшле иткән инәбеҙ;
Һөйләп-көйләп тел менән

Хисле иткән инәбеҙ,
Көслө иткән инәбеҙ;
Күҙебеҙҙе тел менән
Нурлы иткән инәбеҙ,
Үҙебеҙҙе тел менән
Йырлы иткән инәбеҙ!...

Донъяла бөтәһе лә бер-береһе менән бәйле, гармонияла. Әгәр сылбырҙың береһен генә тағатһаң, бөтә сылбыр көсһөҙләнергә тора.

Үкенескә karшы, беҙҙең тормошобоҙҙа әсә, өләсәй, kатын-kыҙ һәм йәш быуын араһындағы мөнәсәбәттәргә хәҙерге йәмғиәт kоролошо кире тәьҫир яһаны.

Һөҙөмтәлә күп кенә проблемалар kалkты, шулар араһында тел мәсьәләһе лә актуаль яңғырай. Бер яktан, башkорт милләтле кешеләр үҙ туған телдәрен оноттолар, балалар үҙ телдәрен белмәй үҫәләр, икенсе яktан, йәмғиәттә әҙәп-әхләk kанундары юkkа сыға. Тел, тәрбиә, әҙәп, әхләk. Был төшөнсәләр бер-береһе менән ныk бәйле, береһен генә «онотоу» ҙа фажиғаға юлыkтыра. Ә бына әсә теленең йәш быуынды тәрбиәләүҙә әһәмиәте тураһында үткән быуатта йәшәгән атаkлы грузин педагогы Я.С.Гогебашвилиҙың һүҙҙәре иғтибарға лайыkлы.

«Әсә теле кешенең йәшәүе, тормошо менән тышkы яktан ғына бәйләнмәгән, ул тиҙ генә сисә һалып ташлай торған өҫ кейеме түгел. Әсә теле кешенең бөтә организмына тамыр йәйә, кешенең бөтә тәбиғәте әсә теле менән һуғарылған була. Әсә теле кешенең психологик һәм физиологик төҙөлөшөнә ярашлы рәүештә тәбиғәт тарафынан тыуҙырылған иң kиммәтле kорал һанала. Әсә теле генә, туған тел генә баланың һәр бер уйын, аңын, хистәрен һәм хәрәкәтен бөтә нескәлектәре менән сағылдыра ала.»[2], тигән ул.

Шулай итеп, бөйөк педагогтар халыkтың көндәлек тормошонда һәм тәрбиә эшендә туған телдең роленә ҙур баһа биргәндәр.

Тик быуатта бындай kараштар үҙ баһаһын юғалта биребрәк kуйҙы. Уның ниндәй һөҙөмтәләргә килтереүен беҙ хәҙер бөтәбеҙ ҙә беләбеҙ.

Бына, мәҫәлән, бер миҫал. Ҡайһы бер kатын-kыҙҙарҙан ошондай һүҙ ишетергә тура килә: үҙем башkорт милләтенән булһам да, башkортса һөйләшә белмәйем һәм баламды ла телгә өйрәтә алмайым. Ә өләсәләре белә, әммә улар ситтә йәшәй.» Ниндәй аянысдлы хәлӘ Быуындар бәйләнеше, үҙебеҙҙең халыkса тәрбиәләү, тел тураһында һөйләүҙең был осраkта мәғнәһе юk. Йәш ата-әсәләрҙең үҙ телен белмәүе.онотоуы, милли үҙаңлы үҫешмәгән булыуы – былар бөтәһе лә 70-се йылдарҙа барған урыҫлашыу сәйәсәте һөҙөмтәһе.

[2] *Я.С. Гогебашвили Избранные педагогические сочинения. Москва, 1954, С. 24 – 25.*

бындай осраkта беҙгә, уkытыусыларға, башkорт телен тергеҙеү буйынса күп нәмәләр эшләйһе бар. Ышанғы килә: хәҙер мәктәптәрҙә беҙ уkытkан башkорт kыҙҙары киләсәктә ғаилә kороп үҙ балаларын туған телдәрендә тәрбиәләрҙәр. кеше итерҙәр.

Ғаиләлә туғантел тәрбиәһе тураһында уйлағанда, һәр ваkыт мин С.Мифтаховтың «Дуслыk һәм мөхәббәт» драмаһы тураһында уйлайым. Юk, унда тел мәсьәләһе күтәрелмәй. Драмала утыҙынсы йылдарҙа яңы йәмғиәттә ғаилә эсендәге мөнәсәбәттәрҙең үҙгәреүе һүрәтләнә. Шулай ҙа, минеңсә, тел мәсьәләһенең kырkыулашыуы сәбәптәренең береһе шул осорҙарға барып тоташа. Драманың төп геройҙары – Юлай, колхоз председателе, һәм уның kатыны Айһылыу, бала әсәһе, өй хужабикәһе. Айһылыу өйҙә генә ултырып арый, уның баҫыуға сығып эшләгеһе, йәмғиәткә файҙалы кеше булғыһы килә. Ә Юлайҙың уны эшкә ебәргеһе килмәй. «Ә баланы нисек kарарһың? Әсәлек бурысынды ла онотма», - ти ул. Шулай ҙа Айһылыу эшкә сыға, йәмғиәткә файҙалы кеше булыуға ирешә һәм шул уk ваkытта ир kатыны, әсәлек вазифаларын да башkара.

Һорау тыуа: күпселек kатын-kыҙҙар йәмғиәт өсөн тырышам, аkса эшләйем тип, үҙ йәнен-тәнен аямайынса төрлө урындарҙа тир түгеп эшләргә һәм балаларын борон-борондан беҙҙең халыkтағыса тәрбиәләргә. тел байлығын тапшырырға өлгөрәләрме икән?

«Ватандаш» журналында Вәлиәхмәтов Р. мәkәләһендә ошондай килтерелгән фактлар kыҙыkлы. Был мәkәләлә башkорт kатын-kыҙҙарынан социаль-иктисади проблемалар буйынса анкета һорауҙарына яуап алғандары тураһында хәбәр ителә һәм һөҙөмтәләре бирелә.

Мәҫәлән, «Һеҙҙе эштә нимә kәнәғәтләндермәй?» тигән һорауға яуап биреүселәрҙең бер өлөшө балаларға әҙ ваkыт kалыуы менән аңлатkан. Әгәр ҙә өйҙә олатай-өләсәйҙәр булмаһа, балаларҙы тәрбиәләүгә телевизорҙар, кино, урам ярҙамға килә. «ҫтәүенә, kала шарттарында йәш ярымдан балалар баkсаһына тапшырыла. Унда һәм унан аҙаk мәктәптә бала рус мөхитендә бөтөнләй урыҫлашыуы мөмкин.

Ошондай эҙемтәләр булмаһын өсөн, ата-әсәләргә аңлатыу алып барырға кәрәк. ғаилә, әсә башkорт телен өйрәнеүҙе балалар баkсаһына йәки мәктәпкә генә kайтарып kалдырмаһын, үҙенең ғаиләһенән башлаһын, балаларҙа үҙ туған телдәренә һөйөү һәм ихтирам тәрбиәләһен ине. Һәр әсә баланың шәхес булып формалашыуы өсөн

тырыша, уға әхләҡи, эстетик яҡтан тәрбиә бирергә тырыша. Ә тәрбиә биреү буйынса халыҡтың быуаттар ағымында йыйып килгән бай тәжрибәһе бар һәм балаларҙың аңына, уйына, хистәренә фәҡәт әсә телендә генә тәъсир үтеү мөмкин булыуын иҫбатлаған улар.

Әсә быуындан-быуынға күсеп килгән халыҡ тәжрибәһен, әхләген, традицияларын балаларны тәрбияләүҙә, рухи яҡтан байытыуҙа туған телде уңышлы файҙаланһа, бала киләсәктә үҙ урынын табыр, юғары культуралы шәхес булып үсешер.

Бөйөк рус ғалимы һәм педагогы К.Д.Ушинский халыҡ теле хаҡында: «Халыҡ теле тарихҡа тиклем булған замандарҙан башлап халыҡтың бөтә рухи тормошонда бер ваҡытта ла һулымай мәңге сәскә атып торған һүнмәҫ сәскә» тигән фекер әйткән.

Әсәйҙәр ҡулында был сәскә бер ҡайсан да һүнмәҫ!

*Валиахметов Р. и др. Семья и общество глазами современной башкирской женщины. //Ватандаш, 2001 -№7 С. 192-199.*

*Ушинский К.Д. Избранные педагогические сочинения. Москва, 1945,С.145.*

## «Башkорт теле hәм әҙәбиәте йыл уkытыусыhы -2008» Республика конкурсы буйынса материалдар

### Атайыма хат

*Кәримова Гөлнара Яхъя kыҙының педагогик фәлсәфәhе*

Бөтәhе лә бала сактан башлана. Атай hәм әсәйҙән.

Атай, иҫләйhендер, hин беҙҙең ырыуҙың тарихын йыш hөйләй торғайның. Үҙебеҙ өсөн ғорурланыуҙан нисек башым юғары күтәрлгәнен белhәң... Ошо тойғо миндә hаман hаkлана, ул мине күтәрә. Ә ырыуыбыҙ тарихында hинең беренсе юғары белемле уkытыусы булыуынды мин яңырак белдем. Хәҙер Юлдашбаевтарҙың өстән бер өлөшө уkытыусы hөнәрен hайлаған. Шуға күрә ғаиләбеҙҙә бөтәhе лә уkытыусы булыуы hис тә ғәжәп түгел.

Был hөнәр - беҙгә тапшырылған оло мираҫ. Шул уk ваkытта уkытыусы hөнәренә kушылып изге нәмәләр аманат итеп kалдырылды. Ул – Тыуған илгә hөйөү, унын менән ғорурланыу тойғоhо. Был хистәр илебеҙ, халkыбыҙ тарихын, легендаларын белеүҙән башлана. Ҡараhаkал, Батырша, Салауаттар көрәше хаkында hүҙ сығыу менән тәндәр семерләп китә. Ҡаhым түрә,

М. Мортазин, М. Шайморатовтар тураhында hөйләгәндә, "Беҙ ҙә ошо милләттән бит әле," - тип уйлап, күңелдәр күтәрелә, уларға оkшау теләге уяна.

Йөрәктән сыkkан hүҙ генә йөрәккә етә. Шуға күрә был тойғоларҙы үҙендә генә үҫтереү етмәй, йәштәрҙә лә тәрбиәләргә кәрәк. Вариҫтарыбыҙ барлығын белеү киләсәккә өмөт уята.

Атай, hин гел яңылыkkа ынтылдың. Балалар менән әҙәби экспедицияларға йөрөүең, шунан бөтә ауылды, районды шаулатып конференциялар ойоштороуың хәтеремдә яkшы hаkлана. Ә шиғри бәйгеләр, әҫәрҙәр сәхнәләштереү кеүек саралар беҙҙең күңелдәрҙә әҙәбиәткә генә түгел, ғөмүмән, ижадkа, тормошkа ижади kарарға юл астылар.

Ижади шәхес, ижади hәләт, ижади фекерләү – былар бөтәhе лә бөгөнгө көндә актуаль яңғырай. Мине лә улар kыҙыkhындыра, борсой, әйҙәй. Сөнки ижади шәхестәр генә бөгөнгө ауыр тормошта юғалып kалмай, үҙҙәренең эштәренән kәнәғәтлек кисерә ала, ә ижади студенттар, йәғни буласаk уkытыусылар, шул шәхестәрҙе тәрбиәләй ҙә инде. Әҙәбиәт hәм тел дәрестәре йәштәребеҙҙе уйландырhын, фекерләргә, hөҙөмтә яhарға өйрәтhен. Бының өсөн төрлө юлдар, алымдар эҙләйем. Әҙәби бәхәстәр, эвристик әңгәмәләр, проблемалы ситуацияларҙы хәл итеү, фәнни hәм ижади тикшеренеү кеүек

методтарға мин йыш мөрәжәғәт итәм. Фәнни йәмғиәт эше, гәзиттәр сығарыу, шиғырҙар яҙыу, төрлө характерҙағы яҙма эштәр башkарыу мине лә, йәштәрҙе лә илhамландыра. Алда әйтелгәндәр миңә башkорт теле hәм әҙәбиәте фәнен уkытыуҙа хеҙмәттәшлек педагогикаhына таянырға нигеҙ бирҙе.

Бөгөнгө көндә яңы технологиялар хаkында бәхәстәр йөрөй. Сит илдән килгән hәм заманса технологиялар башkорт телен уkытыуҙа файҙа бирәме? Был бәхәскә мин дә kушылыр инем. Урынлы kулланылған технологиялар тел hәм әҙәбиәт дәрестәрен яңы басkысkа күтәрә, уkыусыларҙы ижади эшкә әйҙәй. Беҙҙең дәрестәребеҙ математика, тарих, география, биология дәрестәренән hис тә kайтыш булмаsка тейеш. Шуға күрә мин быйыл " Башkорт тел hәм әҙәбиәте дәрестәрендә мультимедиялы презентациялар kулланыу" темаhы өҫтөндә эшләй башланым. Нимә генә эшләhәк тә hәр ваkыт шуны иҫтә тотабыҙ – беҙ ябай уkыусыларҙы түгел, ә буласаk уkытыусыларҙы тәрбиәләйбеҙ, үҫтерәбеҙ.

Әҙәбиәт – оло бер донья. Әйтеп kарағыҙ, мәктәптә йәш кешене әҙәп hәм әхләkкә өйрәтеүсе тағы ниндәй фән бар?
Ошо гүзәл әҙәбиәт доньяhына ла, атай, hин юл астың. Бала саkта ниндәй генә эш башkарhаk та, hин беҙгә төрлө шиғырҙар, хикәйәләр, әкиәттәр hөйләр инең. Бигерәк тә М. Кәрим әҫәрҙәрен. Мин hин hөйләгән М. Кәрим шиғырҙары аша башkорт әҙәбиәтенә килдем, ахырыhы. Хәҙер ул минең остаздарымдың береhе. Уның фәлсәфәүи әҫәрҙәре мине тойғоландыра, Ш. Бабичтың ялkынлы шиғырҙары йөрәгемде дөрләтә, М. Аkмулла нәсихәттәре дөрөҫ юлдан тайпылдыртмай. Р.Ғариповтың шиғырҙары тел hәм әҙәбиәт хаkында уйҙарға күмә. Ошо тойғоларҙы балаларға еткерергә, әҫәрҙәге рухи kиммәттәрҙе уларҙың күңеленә йоkторорға ине. Шуға күрә мин шиғырҙарҙы йүгертеп уkытырға түгел, ә авторҙарының фекерҙәше, тойғолашы, мөнәсәбәттәше итеп тәрбиәләргә тырышам. Был осраkта улар hүҙҙең мәғәнәhенә, көсөнә, hүрәтләү сараларына битараф булмай.

Ижади уkытыусы, тимәк, талантлы. Атай, ә hинең талантың күп kырлы булды. Шиғыр, хикәйәләр яҙҙың, китап сығарҙың, төрлө саралар уртаhында kайнаның, гармуның менән байрамдарҙың йөҙөк kашы булдың. Тальянда уйнарға мин дә өйрәндем. "Ҡыҙҙар бейей белергә тейеш," - тип мине башkортса тыпырҙарға ла өйрәттең. Ә мин сәхнәгә бейергә сыkkас, kалай ғорурландың.

Иң мөhиме, hин уkытыусы буларak та, атай буларak та кеше булырға өйрәттең. Был да - минең төп максат. Р. Ғарипов әйткәнсә : "Кеше

Кешеләргә кәрәк булhын,

Бер ҡайҙа ла артыҡ булмаһын,
Эшләгәндә,
Янып эшләһен дә
Ял иткәндә,
Көлһөн,
Йырлаһын!
Хыялланһын,
Янһын,
Ҡанатланһын,
Тынғы белмәй алға ынтылһын,
Һөйһөн,
Көйһөн,
Күркәм булһын кеше,
Халыҡ ғәме менән ул тулһын!
Шундай бай, бәхетле итеп күрәм
Киләсәктең
Матур кешеһен!"

Атай, әсәйем менән бергә беҙҙең күңелдәргә изгелек орлоҡтарын һалып, уларға шытып сығырға булышлыҡ иткәнең өсөн, башҡорт теле һәм уҡытыусыһы һөнәре серҙәренә төшөндөргәнең өсөн, барыһы өсөн дә ҙур рәхмәт!

**Тормош юлдары ҡатмарлы...**

Нәжиб Асанбаевтың «Рәйсә» һәм «Фәйзи» драмалары.

Дәрес-әңгәмә. 52-се төркөм

**Маҡсаты:** Әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү; драматик жанрҙарҙы анализлау күнекмәләрен үҫтереү; сәнғәткә һөйөү уятыу; бәхеткә һәм мөхәббәткә яуаплы ҡарау тойғоларын еткереү.

**I Ойоштороу моменты**

Һаумыһығыҙ, студенттар, хәйерле көн, ҡунаҡтар! Башҡорт әҙәбиәте дәресен башлайбыҙ. Мин һеҙҙе Н.Асанбаевтың «Рәйсә» һәм «Фәйзи» дилогияһы хаҡында һөйләшергә саҡырам.

«Рәйсә» һәм «Фәйзи»... Драматург Н.Асанбаев күптәрҙең күңеленә шул пьесалар менән инә. Береһе 1957 йылда, икенсеһе 1960 йылда яҙылған был әҫәрҙәр беҙҙең әсәйҙәребеҙ, атайҙарыбыҙҙың яратып ҡараған пьесалары була. Хатта хәҙер ҙә беҙ шул драмала башҡарылған йыр «Рәйсә»,йәки унын көйөн ишетһәк, йөрәктәр елкенеп китә. Атайҙарҙың тальян уйнай-уйнай үткәргән күңелле йырлы-көйлө мәжлестәре иҫкә төшә.

Магнитофондан «Рәйсә» йыры яңғырай.

«Онотолмаҫ студент йылдары... Эркелешеп, һәр төрлө спектаклдәргә һәм концерттарға култпоходтар ойоштороп йөргән саk. Кеҫә яғын һис тә kарап тормайбыҙ, барыһын да күреп kалырға ашkынабыҙ. Ул саkта kараған «Рәйсә» спектакле ғүмерем буйы күҙ алдында тора һымаk. Бына бит ул сәнғәттең илаһи көсө!»-ти билдәле балалар яҙыусыһы Р.Байбулатов. Яҙыусы

Ғ.Рамазанов былай ти: «Был әҫәрҙең сәхнә ғүмере бәхетле, киң kатлам тамашасыларға тәьҫире көслө булды». Ошондай уk дәлил һәм хәтирәләрҙе күпләп килтерергә була. Кешеләрҙең күңелдәрен арбар ниндәй тылсымлы көскә эйә? Дәүер хәтирәһе булып kалырлыk көс kайҙан килде икән?

Күреүебеҙсә, драмалар икәү һәм беҙ дилогиялар менән эш итәбеҙ. Проза өлкәһендә дилогия, трилогия, пенталогиялар менән йыш осрашабыҙ. Ә драматургик дилогия үҙенсәлектәре нимәлә? Ошо һорауға Тимерғәле Килмөхәмәтов фекерҙәренә, күҙәтеүҙәренә kолаk һалайыk.

(Ибраһимова Ю. белдермәһе. Ул башkорт драматургияһындағы дилогияларҙың үҙенҫәлектәрен һанап үтә.)

Уkытыусы Т. Килмөхәмәтов ғилми хеҙмәттәренә күҙәтеү яһай.

Әҫәр буйынса һөйләшеүҙе дауам итәбеҙ. Жанры буйынса ниндәй төргә инә, конфликты ниндәй?

Йөкмәткеһен иҫкә төшөрәйек һәм һорауға яуап бирәйек. Студентар сюжетты иҫкә төшөрә. Драманың тормош-көнкүреш драмаһы, ә конфликты Рәйсә менән Фәйзиҙең бер-береһен аңламауы арkаһында, тормошkа төрлөсә kарауҙары, Фәйзиҙең Зөһрә исемле матур kатын менән йәшәүенә бәйле икәнлеге асыkлана.

Шулай итеп, беҙҙең күҙ алдыбыҙҙа - мөхәббәт өсмөйөшө

Фәйзи



Зөһрә Рәйсә

Тик өсмойөш башkа геройҙар яҙмышына ла көслө йоғонто яһай: Рәйсә менән Фәйзиҙең kыҙы һәм әсәһенә.

Әҫәрҙә kалған геройҙар Зөһрә, Рәйсә характерҙарын асырға ярҙам итә: Харис һәм Зөлхибә, Ғәйшә менән Хәлил, Гөлниса.

Фәйзиҙең үҙ тормошондағы борολошо һөҙөмтәләрен аңлар өсөн әҫәрҙең беренсе бүлеген уkыу ҙа етә. Ул Зөһрәне алып, дөрөҫ аҙым яһағанмы? Беренсе бүлектең йөкмәткеһен иҫкә төшөрәйек. (1 студент һөйләй).

- Зөһрә, Гөлниса һеҙҙә ниндәй тойғолар уятты? Тәьҫораттар менән бүлешегеҙ әле. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, Зөһрә Фәйзиҙе яратамы? (Яуаптар, фекерҙәр).

Зөһрә менән Гөлнисаның йәшәү маkсаты нимәлә? Өҙөк уkыйыk һәм яуап бирәйек. (Ролләп уkыу, 19-сы б.)

Тимәк, улар ниндәй «бәхетле» тормошkа ынтылалар? (эшләмәй генә, бай, етеш, «типтереп» йәшәү)

Ә бына Фәйзиҙең ғаиләһенә улар ниндәй мөнәсәбәттә? (Ролләп уkыу, 24-25-сы б.)

Яуап: Улар Фәйзиҙең ғаиләһен бөтөнләй яратмай.

У: Ә әсәһе быны һиҙәме? Ул Фәйзиҙең ғаиләһе хаkында ниҙәр уйлай?

Яуап: Әлбиттә, әсәһе бик яkшы аңлай, унын күңеле тоя, һиҙә һәм беренселәрҙән булып Фәйзиҙең яңылыш аҙым яһағанын аңлай, үткәндәрҙе һағына.

У: Эйе, ысынлап та һағынырлыk та шул... Рәйсә менән Фәйзиҙең үткәне матур булған. Уларҙың мөхәббәте тарихын һөйләгеҙ әле.

*Яуап: а) Рәйсә менән Фәйзи һуғышта танышалар, аҙаk хат* алышалар (Хаттар хаkында уkыу, 22-се бит); уkытыусы хаттың драма жанрында актив kулланылыуын әйтә.

б) Икәүләп тормош kоралар, уkыйҙар, эш башлайҙар;

в) Береһе – директор, икенсеһе инженер булып эшләй.

У: Ә нимә булды һуң? Бөтәһе лә һәйбәт кенә ине бит? Фәйзи менән Рәйсәнең конфликты нимәлә?

Яуап: Фәйзи Рәйсәне тик kатыны итеп кенә күрәһе килә һ.б.

У: Ә Рәйсә? Әйҙәгеҙ, унын монологын тыңлап kарайыk (Ниғмәтуллина Д. Сәхнәләштереп һөйләй. 98-се б.)

У: Кем һуң дөрөҫ был ситуацияла? (Студенттарҙың бәхәсе, фекер алышыуы). Уkытыусы ла үҙ позицияһын әйтә.

У: Беҙ үҙебеҙҙең фекерҙе әйттек, ә һорауҙар барыбер kалды. Бәлки, шуларға яуапты башkа ғаиләләр яҙмышынан табырбыҙ, ғибрәт алырбыҙ.

(Зөлхибә менән Харис тормошона күҙ һалыу)

Яуап: Улар татыу йәшәй, бер-береһен иғтирам итә, ярты һүҙҙән аңлай һ.б.

Йәш ғаилә - Ғәйшә менән Хәлилдең араһында конфликт тыуа. Әммә эргәлә оло кеше булыуы, унын ярҙам kулы һуҙыуы, урынлы кәңәше йәштәргә дөрөҫ юлға баҫырға ярҙам итә. Был ғаиләнән беҙ ғәфү итеү тойғоһон ғибрәт итеп ала алабыҙ.

*У: Эйе, Рәйсә ярҙамында Ғәйшә Хәлилде ғәфү итә, ә үҙе Фәйзиҙе оҙаk ғәфү итмәй. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, ул ғәфү итергәтейешме?*

*Ғөмүмән, нимәне ғәфү итергә була, нимәне – юk? /Төрлө фекерҙәр/*

Яуап: Ул ғәфү итергә тейеш:

а) Сөнки улар бер-береһен ярата;

б) айырылышыу уларҙың яkын кешеләрен – әсәһе менән kыҙын да бәхетһеҙ итә.

Kыҙы, ҙурайғас, мөхәббәтән kурkа, бәхетһеҙлек килтерә, ти. Ә әсәһе kайғыларға төшә /Монологын уkыу. 102-се б./

*Ысынлап та, драма аҙағында Фәйзи кешелектән сыға. Ярай, Рәйсә, йөрәге етеп, уға ярҙамға килә. Был аҙымды яһарға йәш Рәйсә менәнйәш Фәйзи ярҙам итә. Автор ретроспектива алымын kулланған. әйтегеҙ, был геройҙар булыуы аша автор нимәгә ирешкән? Һеҙ уларҙың киләсәген нисек kүҙ алдына баҫтыраһығыҙ.*

Әҫәрҙе нисек дауам итер инегеҙ?

Күпме геройҙар, ғибрәтле, тормошсан ваkиғалар менән таныштыk. Ғ.Рамазанов фекеренсә, «Рәйсә» менән «Фәйзи» драмалары геройҙарының теле лә үҙенсәлекле. Ә Т.Килмөхәмәтов былай ти: «Н.Асанбаев ябай кешене тулы kанлы, һөйкөмлө итеп ихлас кәүҙәләндерә ул». Һеҙ өйҙә персонаждар телмәрен тикшерҙегеҙ. Һөҙөмтәләр менән беҙҙе таныштырығыҙ.

Шулай итеп, дәрес башында kуйған һорауға яуап бирәйек. Был әҫәр дәүер хәтирәһе булып kалырлыk көс kайҙан килде икән? (Яуаптар, фекерҙәр)

*Дәрес тамамлана. Әүҙем kатнашыуығыҙ өсөн рәхмәт. Баһалау. Өй эшен биреү.*

## *«Kараңғыла фонарҙы kабыҙған ул...»*

М. Акмулла тормошо һәм ижады буйынса балалар әҙәбиәте дәресе

42-се төркөм

**Маkсаттар:** 1. М Акмулла тормошо һәм ижады буйынса дөйөм мәғлүмәт менән таныштырыу.

2. М Акмулла әҫәрҙәрененең бөгөнгө тормоштағы әһәмиәтен асыkлау.

3. Студенттарҙы ғилми хеҙмәттәр менән эшләү үҙенсәлектәренә өйрәтеү.

4. Әҙип шәхесе өлгөһөндә йәштәрҙә патриотик рух һәм әҙәп-әхлаk сифаттарын тәрбиәләү; Акмулла менән ғорурланыу тойғоһон уятыу.

**Йыһазлау:** магнитофон, Акмулла ижады хаkында китаптар, компьютер, экран, Башkортостан картаһы. Парталарҙа – Акмулла шиғырҙарынан өҙөктәр яҙылған карточкалар; һүҙлектәр.

**1. Төркөмдәр өсөн түбәндәге таратма карточкалар:**

1. Башkортостан картаhы
2. М. Аkмулла тормошо hәм ижадынан төп даталар
3. Kунафин Ғ. Олуғ шәхесебеҙ. // Ағиҙел. – 2001. - № 12. - 158-се бит.
4. Аkмулла шиғырҙары (башkорт hәм рус телдәрендә)
5. Садрисламова А. Аkмулла шиғырҙарының жанр үҙенсәлектәре.

**Түбәндәге темалар буйынса слайд-шоу:**

1. Ғалим hәм яҙыусыларыбыҙ Аkмулла хаkында.
2. Аkмулла образы hынлы сәнғәттә.
3. М. Аkмулла исемендәге премия лауреаттары

2. **Дәрестә kулланылған методтар:** үҙ аллы эш, сағыштырыу методы, тикшеренеү, әңгәмә, күргәҙмәлек, мәғлүмәти технологиялар.

3. **Төшөнсә, терминдар:** жанр, хитап, мәрҫиә, мәдхиә, мәktүп, әҙәп, шөкөр, иман, сабыр h.б.

4. **Предмет – ара бәйләнеш:** hынлы сәнғәт, әҙәбиәт теорияhы.

***Эпиграф:*** ***1.*** *Kараhаң, Аkмулланың*
*китабы был,*
*Эсендә – hыуhағанға шәрбәтле*
*hыу.*
*Битенең бере көләп, бере hүгәр,*
*Тура hүҙе – берәүгә им, берәүгә ыу.*
*М. Аkмулла.*

*2. "Әҙип hәм ғалимдары булмаған*
*халыk бәхетhеҙ, мәшhүр кешеләрен*
*онотkан халыk яkлаусыhыҙ,*
*әҙәбиәте булмаған милләт рухhыҙ."*
*Р. Фәхретдин.*

Дәрес планы

| № | Дәрес планы | Ваkыт |
|---|---|---|
| 1. | Инеш hүҙ | 1мин |
| 2. | Дәрестең маkсатын билдәләү. Әңгәмә. | 3мин |
| 3. | «Ғалим hәм яҙыусыларыбыҙ М. Аkмулла хаkында». Слайд-шоу.<br>Әҙәбиәт менән таныштырыу. | 3мин |
| 4. | Төркөмдәргә эште аңлатыу. Төркөмдәргә үҙ аллы эше, тикшеренеүе. | 1мин |
| 5. | I төркөм яуабы «Аkмулла эҙҙәре буйлап». | 10мин |

| | | |
|---|---|---|
| 6. | «Акмулла образы һынлы сәнғәттә». Презентация. Әңгәмә. | 3мин |
| 7. | II төркөм яуабы. Шиғырҙар укыу. Әңгәмә. | 8мин |
| 8. | III төркөм яуабы. | 3мин |
| 9. | «М. Акмулла исемендәге премия лауреаттары». Слайд-шоу. Әңгәмә. | 3мин |
| 10. | Төркөмдәрҙең эшен баһалау. | 3мин |
| 11. | Дәресте йомғаклау. | 2мин |

**I. Ойоштороу моменты**

*Укытыусы:* Һаумыһығыҙ! Бөгөн башкорт әҙәбиәте дәресен мин алып барам. Исемем – Каримова Гөлнара Яхъя кыҙы, Туймазы педагогия колледжы укытыусыһымын.

**II. Максатка сығыу**

*Укытыусы:* М Кәримдең "Тауҙар" исемле шиғырында ошондай юлдар бар:

"Тауҙар кешеләр шикелле -
Бейек булған һайын
Ғүмерҙәре бәхеслерәк,
Яҙмыштары кыйын."

Эйе, әҙәбиәтебеҙ киңлегендә Акмулла тауы бөгөнгө көндә лә бейек, юғары, ғорур булып кала. Елдәргә лә бирешмәй, йәшендәрҙән дә куркмай. Һәм шулай булып каласак та...

Бөгөнгө дәресебеҙ – ошо мәшһүр мәғрифәтсе-шағир Мифтахетдин Камалетдин улы Акмулла хакында.

Һеҙҙең иғтибарға Ҡаҙакбаев Мөхәмәтйән башкарыуында "Акмулла бәйет"ен тәкдим итәбеҙ. Тема буйынса белемегеҙҙе иҫкә төшөрөгөҙ, дәрестә шағир хакында нимәләр белгегеҙ килә, шуны уйлай тороғоҙ, тема һәм эпиграфты дәфтәрегеҙгә яҙып куйығыҙ.

*( Акмулла бәйете тыңлана)*

Бөгөнгө көндә М. Акмулла исеме йәшәй, ул замандаштарыбыҙҙы рухландыра. Яңырак кына БДПУ алдында уға һәйкәл куйылыуы быға дәлил. Тыуыуына 177 йыл тулыуға кармаҫтан, әҙип рухы бөгөнгө көндә онотолмай. Бының сере нимәлә? Акмулланың һаман да сафта калыуын нисек аңлатыр инегеҙ? Бөгөн дәрестә шул һорауға яуап бирәбеҙ.

Әйтегеҙ, кайһы сакта кеше, уның исеме халык хәтерендә оҙак һаклана?

*Яуаптар:* 1.Уның тормошо башкалар өсөн өлгөлө булғанда. Ул юғары әхләки сифаттарға булырға тейеш. Халык өсөн йәшәй. һ.б.

2.Шиғырҙары матур. Унын шиғырҙарын кешеләр ярата.

*Укытыусы:* Матур шиғырҙар тигәнде нисек аңлайһығыҙ?

*Яуаптар:* Унда күтәрелгән мәсьәләләр кешеләрҙе нык kыҙыkһындырһын. Шиғырҙар матур төҙөлһөн һ.б.

*Укытыусы:* Тимәк, беҙгә дәрестә нимәләрҙе өйрәнергә кәрәк буласаk?

*Яуаптар:* а) Акмулла шәхесен, тормош юлын;

б) Акмулла шиғырҙарының идея-проблемаларын, уларҙың бөгөнгө көндә актуаллеген;

в) шиғырҙары төҙөлөшөн, шағирлыk оҫталығы кимәлен.

**III. Төп өлөш**

Шулай итеп, дәрестә түбәндәге мәсьәләләрҙе тикшерәбеҙ.

*(Таkтала яҙылған)*

1. М. Акмулла эҙҙәре буйлап. Әҙип биографияһы
2. Акмулла шиғырҙарының идея-проблематик офоkтары.
3. Шиғырҙарының жанр үҙенсәлектәре. Акмулла - шиғыр оҫтаһы.

Төркөмдәргә бүленеп эшләйбеҙ. Һәр төркөм үҙе теләгән проблема буйынса эшләй. Материалдар күп, мин һеҙгә логик – мәғнәүи модель буйынса эшләргә тәkдим итәм. Логик – мәғәнәүи модель – материалдың бөтә үҙенсәлектәрен координат уkтарында туплаған схема-конспект. Һеҙ мөһим тип һанаған яңылыkты, мәғлүмәтте координат төйөндәрендә билдәләп барығыҙ. Нисә уk, нисә төйөн икәнен үҙегеҙ хәл итегеҙ. Дәрес аҙағында был моделдәрҙе сағыштырырбыҙ, баһаларбыҙ.

М. Акмулла ижады буйынса һөйләшеү аҙаkkыһы булмаç. Шуға күрә тема буйынса әҙәбиәт менән танышыу һеҙгә файҙалы булыр тип ышанам.

*(Әҙәбиәт хаkында һөйләү. "Ғалим һәм яҙыусыларыбыҙ М. Акмулла хаkында" презентацияһы.)*

Төркөмдәргә темалар бүленә.

*Укытыусы: 1 -се төркөм* "М. Акмулла эҙҙәре буйлап" картаһын төҙөй. Уларға әҙип биографияһы хаkында карточкалар, Башkортостан картаһы тапшырыла.

*2-се төркөм* Акмулла шиғырҙарында күтәрелгән проблемаларҙы өйрәнә. Һеҙгә Ғ. Кунафиндың "Олуғ шәхесебеҙ" исемле мәkәләһе, М. Акмулла шиғырҙары яҙылған карточкалар таратыла. Мәkәлә менән танышығыҙ, шиғырҙарҙы уkығыҙ һәм шағир ниндәй проблемаларҙы күтәргән, шуны һөйләгеҙ. Яуап биргәндә шиғырҙарҙан өҙөктәрҙе тасуири уkып күрһәтегеҙ.

*3-сө төркөм* шиғырҙарҙың жанр үҙенсәлектәрен тикшерә. Һеҙгә Туймазы педагогия колледжының IV курсында уkыған Садрисламова

Альбинаның тикшеренеү эше бирелә. Шағир ниндәй шиғыр төрҙәрен ҡулланған, был төрҙәр ҡайһы халыҡ әҙәбиәтенән килгән икәнлеген билдәләргә кәрәк. Ошоға таянып, схема эшләп ҡарағыҙ.

Төркөмдәргә 7 – 8 минут ваҡыт бирелә.

*(Төркөмдәр кәңәшләшеп эшләй. Уҡытыусы ярҙам итә.)*

*I төркөм вәкиле яуап бирә.* Ул, таҡталағы картаға таянып, Аҡмулланың тормош юлы хаҡында һөйләй.

*Уҡытыусы:* Аҡмулла тормошо нимәһе менән фәһемле?

*Яуаптар:* - Ул һәр ваҡыт ябай кешеләр араһында, тимәк уларҙың аҡ-зарын яҡшы аңлай. Аң-белемгә өндәй. Ябай халыҡты уҡыта. Ауыр тормош юлын кисерә һ.б.

Уҡытыусы: Һеҙ рәссам булһағыҙ, шағир хаҡында ниндәй картина яҙыр инегеҙ һәм ни өсөн?

*(Яуаптар)*

Ә хәҙер "Аҡмулла образы һынлы сәнғәттә" презентацияһын ҡарайыҡ. Һеҙ күҙаллаған картиналар был күргәҙмәлә бармы икән? (Презентацияны ҡарау). Картиналар аша замандаштарыбыҙ Аҡмулла хаҡында ниндәй фекер йөрөтә ала?

*II төркөм яуап бирә. Шағир ижадында түбәндәге мәсьәләләр күтәрелә.*

- Ул халыҡты аң-белемгә өндәй ("Башҡорттарым")
- Кешеләрҙе әхләҡи сафлыҡҡа саҡыра. ("Нәсихәт")
- Байлыҡ артынан ҡыуыусыларҙан әсе көлә. ("Нәфсе")
- Телгә иғтибарлы булырға, уйлап һөйләргә ҡуша. ("Аҡыл")
- Тәбиғәт хаҡында яҙа. ("Яҙ")һ.б.
- Тормоштоң ауырлығына бирешмәҫкә саҡыра. (Өмөт)

Уҡытыусы: Шағир күтәргән мәсьәләләрҙең ҡайһыһы бөгөн актуаль тип уйлайһығыҙ? Ни өсөн?

"Нәсихәттәр" шиғырында иң кәрәкле нәмәләр менән һеҙ килешәһегеҙме? (Һүҙлектән был һүҙҙәрҙең мәғнәләрен асыҡлау)

Иман, намыҫ, аҡыл, әҙәп, сабыр, ихлас, был сифаттар замандаштарыбыҙҙа бармы икән? Аҡмулланың фекерҙәре менән һеҙҙең фекерҙәрегеҙ тап киләме? Бөгөнгө көндә кеше ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш?

Һеҙ был нәсихәттәрҙең ҡайһынының үҙ балаларығыҙга еткерер инегеҙ?

*(Яуаптар)*

*Уҡытыусы:* Кавказ халыҡтарында бер фекер йәшәй: кеше 30 йыл уҡырға, 30 йыл сәйәхәт итергә, 30 йыл күргән белгәндәрен башҡаларға еткерергә тейеш. Аҡмуллаға 64 йыл йәшәргә насип була. Уҡырға ла өлгөрә моғайын, ғүмере буйы уҡыйҙыр ҙа, сәйәхәт итә, кешеләрҙе

аң-белемгә, әхлакka өйрәтә. Туғандаш халыkтар араhында йәшәү уға күп нәмәләр бирә. Был унын шиғриәтенә лә йоғонто яhай. Минең фекерҙе III төркөм үҫтерер тип ышанам.
III төркөм сығыш яhай, "Аkмулла шиғырҙарынын жанр үҙенсәлектәре" схемаhы менән таныштыра.

*Укытыусы:* Әйҙәгеҙ Садрисламова Альбина төҙөгән схема менән сағыштырайыk. *(Экранда схема күрhәтелә.)* Схемалар тап киләме? ( Хитап, мәрҫиә, h.б. терминдарҙы аңлатыу)

Ошо hөйләгәндәргә таянып, Аkмулланың ниндәй шағир икәнлеген күрәбеҙ?

*Яуап:* Ул – шиғыр оҫтаhы h.б.

Дәрес башында kуйған hорауға яуап бирәйек. Аkмулла бөгөнгө көндә лә беҙҙең сафта. Бының сере нимәлә?

*Яуаптар:* Ул халыkты аң белемгә саkыра h.б.

Әҙәпле, әхләkи сифаттарға эйә булырға өндәй, үҙенең йәшәйеше, булмышы менән быны иҫбатлай. Улар бөгөнгө көндә бик тә актуаль. h.б.

*Укытыусы:* Аkмулла - уkытыусы. Уның юлын дауам итеүселәр ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш тип уйлайhығыҙ?
*(Яуаптар)*

Ысынлап та, Миәкә районы хакимиәте Башkортостан сәнғәте һәм әҙәбиәте өлкәhендә эшләүсе, Аkмулла идеяларын үҫтереүсе замандаштарыбыҙға премия булдырҙы. М. Аkмулла исемендәге премия лауреаттары менән танышайыk. Улар – шағирҙың вариҫтары.

*("Аkмулла исемендәге премия лауреаттары" Презентация kарау)*

*Укытыусы:* Хәҙер логик – мәғнәүи моделдәрегеҙҙе сағыштырайыk. Кем үҙ моделе хаkында hөйләргә теләй, рәхим итегеҙ. *(Студенттарҙың hөйләүе).*

Төркөмдәр эшен баhалайыk.

*(Төркөмдәр бер-береhенең эштәрен баhалай.)*

**IV. Йомғаkлау**

*Укытыусы:* Р. Фәхретдиндең шундай hүҙҙәре бар. "Әҙип һәм ғалимдары булмаған халыk бәхетhеҙ, мәшhүр кешеләрен онотkан халыk яkлаусыhыҙ, әҙәбиәте булмаған милләт рухhыҙ."Эйе, беҙҙең халыk бәхетле, милләтебеҙ рухлы. Мәшhүр кешеләребеҙҙе онотмайыk. Аkмулла исеме онотолорға тейеш түгел.

Дәрес өсөн ҙур рәхмәт. hау булығы

**Йәнлектәр һәм үҫемлектәр доньяһында.**

Башҡорт теле дәресе.

2-се курс.Рус төркөмө

**Маҡсат:** 1.Йәнлек һәм үҫемлектәр» темаһына бәйле һүҙҙәрҙе телмәрҙә ҡулланырға өйрәтеү.

2.Студенттарҙың телмәрен үҫтереү

3.Башҡорт әҙәбиәте, халыҡ ижады әҫәрҙәре аша халҡыбыҙҙың тәбиғәткә мөнәсәбәтен күрһәтеү. Тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

**Йыһазлау:** Хайуандар, ҡоштар, үләндәр һ.б. һүрәттәре; магнитофон, ноутбук, экран, карточкалар.

**Ҡулланылған методтар:** әңгәмә, күргәҙмәлек, тасуири уҡырға өйрәтеү методтары, күнегеү, компьютер технологияларын ҡулланыу һ.б.

**Актив үҙләштереү өсөн һүҙҙәр:** тәбиғәт, йәнлектәр, үҫемлектәр, ағас, ҡош, балыҡ, бөжәк, үлән, саған, бөркөт, ыласын.

**Предмет-ара бәйләнеш:** Биология, башҡорт әҙәбиәте, халыҡ ижады, әҙәбиәт теорияһы.

| № | Дәрес планы | Телмәр үҫтереү | Ваҡыт |
|---|---|---|---|
| 1. | Ойоштороу мәле | Диалогик телмәр | 1 |
| 2. | Маҡсатҡа сығыу. Теманы билдәләү | | 2 |
| 3. | Төп өлөш. Схема буйынса эш. | | 3 |
| 4. | Һүҙлек эше. Үтелгән темаларҙы актуалләштереү. Һүрәттәр буйынса әңгәмә. | Һөйләү телмәрен үҫтереү | 5 |
| 5. | Эпиграф хаҡында әңгәмә | Диалогик телмәр | 2 |
| 6. | Йомаҡтар буйынса эш. Йәнлектәр. | Уҡыу телмәре. Диалогик телмәр | 4 |
| 7. | Балыҡтар. Карточкалар менән эшләү. | Монолог ик, яҙма телмәр | 4 |
| 8. | Ҡоштар. С.Юлаев шиғырҙарын анализлау. | Аңлау телмәре | 4 |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 9. | Бөжәктәр. Карточкаларҙа эш. Һөйләмдәр төҙөү. Һынамыштар. | Яҙыу телмәре. | 4 |
| 10. | Ағастар. К. Кинйәбулатова «Көҙ еткәс». | Укыу телмәре | 7 |
| 11. | Үләндәр. Һөйләмдәр төҙөү. | Яҙыу телмәре | 5 |
| 12. | Һығымта яһау. | Диалогик телмәр | 2 |
| 13. | «Уралтау» ҡобайырын тыңлау. Слайд шоу ҡарау. | Тыңлау телмәре | 2,5 |

**I Ойоштороу мәле**

*Укытыусы:* Һаумыһығыҙ! Минең исемем Гөлнара Яхъя ҡыҙы Кәримова. Туймазы педагогия колледжында башҡорт телен уҡытам.

Кәйефтәрегеҙ нисек?

Дәресте башлайыҡ.

**II Фонетик-орфоэпик минут**

Һөйләшеү алдынан телде шымартып алабыҙ *(Экранда – тиҙәйткестәр)*

1. Ҡара ҡарға ҡарҙан бара,
 Ҡанаттарын ҡаға-ҡаға.
2. Үрмәксе, үрмәксенән күрмәксе,
 үргә үрелеп-үрелеп үтеп-һүтеүселәрҙе
 күҙ уңынан үткәрҙе.

**III Макcатка сығыу.**

*Укытыусы:* Ҡыҙҙар, егеттәр, һүрәттәргә ҡарағыҙ. Беҙ дәрестә нимә хаҡында һөйләшербеҙ тип уйлайһығыҙ?

*Яуап:* Йәнлектәр һәм үҫемлектәр хаҡында һөйләшербеҙ тип уйлайбыҙ. *(һүҙҙәрҙе ҡабатлап уҡыйыҡ әле)*

*Укытыусы:* Дөрөҫ. *(Таҡтаны аса)* Дәфтәрегеҙгә теманы һәм эпиграфты яҙып ҡуйығыҙ.

**IV Төп өлөш**

*Укытыусы:* Беҙҙең тема - «Йәнлектәр һәм үҫемлектәр доньяһы».

*Эпиграф:* Тәбиғәт – һәр бер бите
тәрән йөкмәткеле китап.
И.Гёте.

Природа – единственная
книга, все страницы
которой полны глубокого содержания.
И.Гёте

Әйтегеҙ, йәнлектәргә һәм хайуандарға нимәләр инә?
Ә үҫемлектәр доньяһына нимәләрҙе индерерһегеҙ? *(Схема эшләү)*




*(Ошо схема буйынса эшләү аша өйрәнелгән һүҙҙәрҙе иҫкә төшөрөү, яңы һүҙҙәрҙе үҙләштереү. Экранда һүрәттәр күрһәтелә).*

Башҡортостанда йәшәүсе ниндәй йәнлектәрҙе беләһегеҙ?

*Яуап:* айыу, ҡуян, бүре, һеләүһен, терпе, мышы, төлкө, шәшке (?)

*Уҡытыусы:* Ниндәй ҡоштар һеҙгә таныш?

*Яуап:* Ыласын, бөркөт, күгәрсен, кәкүк, аҡҡош, торна, тумыртҡа, ҡарлуғас, һандуғас, кәкүк һ.б.

Уҡытыусы һүрәттәрҙе күрһәтә, ҡош исемдәрен атай, студенттар ҡабатлай. Китап менән таныштыра.

*Уҡытыусы:* Балыҡтарҙы беләһегеҙме? Атағыҙ.

*Яуап:* Сабаҡ, бәрҙе, бағыр,ҡыҙылғанат, ҡушбаш, йәйен, табан балыҡ, алабуға, суртан.

*Уҡытыусы:* Ҡыҙғаныска ҡаршы, беҙҙең йылғаларыбыҙ һайыға, күлдәребеҙ ҡорой. Шуға күрә күп кенә балыҡтар кәмей. Улар «Ҡыҙыл китап»ҡа индерелгән. Был китапта башҡа йәнлектәр ҙә бар. Бөжәктәрҙең ҡайһыларын беләһегеҙ?

*Яуап:* Бал ҡорто, күбәләк, сиңерткә, ҡырмыҫҡа, ҡуңыҙ, селәүсен.

*Уҡытыусы:* бөжәк һүрәттәрен күрһәтә, исемдәрен әйтә, студенттар ҡабатлай.

*Уkытыусы:* Башkортостанда үҫеүсе ағастар ниндәй?

*Яуап:* Kайын, имән, шыршы, уҫаk, миләш, балан, ерек, kурай еләге, kарағат.

*(Һүрәттәр буйынса эш. Һүҙҙәрҙе kабатлау)*

*Уkытыусы:* Ниндәй үҫемлектәр беләһегеҙ? *(Яуаптар)*

Үҫемлектәр ҙә kыҙыл китапkа индерелә.

Тимәк, былар бөтәһе бергә Башkортостандың үҫемлек һәм йәнлектәр доньяһын тәшкил итә. Тәбиғәтебеҙ бай, матур. Ул беҙҙе ашата, кейендерә. Дәресебеҙҙең эпиграфына kарайыk әле. *(Эпиграфты уkыу).*

*Уkытыусы:*

Тәбиғәт кешене нимәгә өйрәтә икән?

- Студенттарҙың фаразлауы.

Һаkсыл булырға, тәбиғәтте, матурлыkты яратырға, kәҙерләүгә өйрәтә.

*Уkытыусы:* Артабан шул һорауҙарға яуап эҙләйбеҙ. Яуаптарығыҙ дөрөҫkә сығырмы икән, уныһын дәрес аҙағында тикшерербеҙ.

Экранға kарағыҙ. Унда – хайуандар һүрәттәре. Хәҙер мин һеҙгә йомаkтар яҙылған карточкалар таратам. Һеҙ уkығыҙ һәм яуабын табығыҙ.

Улар – таkталағы экранда.

1. Йәйен урманға батша,
   Kышын kарҙан да аҫта
2. Йәйен һоро, kышын аk,
   Уға шулай яkшыраk.
3. Энәләре үҙе менән йөрөй,
   Үҙе тегә белмәй.
4. Әҙәпле генә kоҙаса
   Тауыkтарҙы ярата

Халыk йәнлектәр тураһында бик күп йомаkтар сығарған. Йомаkтар кешене нимәгә өйрәтә?

*Яуап:* Күҙәтеүсәнлеккә, иғтибарлыkkа, образлы фекерләргә өйрәтә. Үҙегеҙ берәй йомаk төҙөп kарағыҙ әле. *(Йомаkтар уйлау)*

Хәҙер мин һеҙгә бер йомаk әйтәм.

Һеҙ яуабын табығыҙ.

Башы бар, сәсе юk.

Күҙе бар,kашы юk.

Kанаты бар, оса алмай.

Яуабы – балыk. Дәрестә ултырыусылар – егеттәр. Арағыҙҙа, моғайын, балыkkа йөрөүселәр барҙыр бит! Ошо шөғөлөгөҙ хаkында һөйләгеҙ әле.

*(Студенттар «Балыkта» темаһы буйынса һөйләйҙәр.)*

*Укытыусы:* Балыkka ау менән йөрөгә яраймы? Ни өсөн? Тимәк, тәбиғәт беҙҙе нимәгә өйрәтә иҫкәртә? hаксыл kараш тәрбиәләй. Киләсәк хаkында хәстәрлек күрергә. hаксылыkka өйрәтә.

*Укытыусы карточкалар тарата. Унда hөйләмдәр яҙылған. Унда k-ғ, к-г хәрефтәрен өҫтәп яҙырға кәрәк.*

Ба(ғ,г)ыр бик тәмле балыk, халыk уны «батша балы(ғ,г)ы» тип атаған.

(Ҡ,К)ушбаш йәй көндәрендә (к,k)үпер аҫтарында, быуаларҙан түбәндә йәшәй.

Ҡыҙыл(ғ,г)анат, бөтә сазан ғаиләhенә ин(г,ғ)ән балыkтар кеүек, йылыраk hыуҙарҙы ярата.

А(k,к) балыk элек беҙҙә аулан(ғ,г)ан промысла балыkтарының иң затлыhы булған.

Ә хәҙер мин hеҙгә шиғыр уkыйым. Авторы кем, шиғыр үҙе нисек атала? С. Юлаевтың «hандуғас» шиғырын уkыу. Студенттар авторҙы әҫәрҙең исемен билдәләй. Лирик герой нимәгә hokлана? *(hандуғас моңона, тәбиғәткә)*

Икенсе шиғыр. «Егеткә» тип атала. Был шиғырҙа ниндәй kоштар телгә алына? *(Шиғырҙы уkыу)* Яуап: Ҡоҙғон, ыласын, бөркөт.

*Укытыусы:* «Егеткә» шиғырында kоштарҙы kулланып, автор ниндәй фекер әйтергә теләгән?

Ир-егет ниндәй булырға тейеш?

*Яуап:* Бөркөт кеүек ғорур, kурkмаҫ. hеҙ үҙегеҙ ниндәй kоштар беләhегеҙ? Ниндәй әҫәрҙәрҙә kош образы осрай? *(Легенда, йыр, әкиәт)* Ҡоштар хаkындағы әҫәрҙәр нимәгә өйрәтә?

*Яуап:* Тәбиғәтте яратырға, кешенең характерын аңларға ярҙам итә.

*Укытыусы:* Ысынлап та kоштар бөтәбеҙгә лә оkшай. Уларҙың hайрауы тәбиғәтте йәнле итә. Урманда тағы ниндәй тауыштар ишеткәнегеҙ бар?

- Бөжәктәрҙең тауышы ишетелә.

Ошо бәләкәй генә йән эйәләренә kарап, кешеләр hауа торошон билдәләй алалар. hынамыш (приметы) тип атала улар. hеҙҙең карточкаларҙа hынамыштар бирелгән. hөйләмдәрҙәге hүҙҙәрҙе тәртипкә килтереп яҙығыҙ.

1. Ямғыр яуа, kанатланhа, kырмыҫka.
2. Бал kорто, умартанан, көн, аяҙ буласаk, бик иртә осоп сыkhа.
3. Ҡороға китер, синерткәләр, көн, ныk сырылдашhа.
4. Күп осhа, үрмәксе ауы, аяҙ, йылы булыр, көн.

Бергәләп тикшереү.

Студенттар үҙҙәренә баһа ҡуя. Бөжәктәр хаҡындағы һынамыштар аша кешеләрҙең ниндәй сифаттарын аса?

Әлбиттә, бал ҡорттары, ҡырмыҫҡалар кешегә файҙа килтерә. Зарар килтереүселәре лә бар. Улар нимәгә зарар килтерә? *(Ағастарға, ҡыуаҡтарға үҫемлектәргә).* Әммә тәбиғәттең һаҡсылары ла бар. Улар – ҡоштар. Шуға күрә ағастарыбыҙ тәбиғәтте йәмләп ултыра. К.Кинйәбулатовтың «Көҙ еткәс» тигән шиғырын ҡарайыҡ әле. Бында ниндәй һүрәтләнә? Тексты уҡығыҙ

*(Аудиояҙма тыңлана. Студенттар карточканан ҡарап баралар)*

*Уҡытыусы:* Ҡайһы ағас авторҙың иғтибарын тартҡан, һәм ни өсөн?

- Ул нисек тасуирлана?
- Аҙаққы строфаны нисек аңлайһығыҙ. Автор ни әйтергә теләне икән?

  *(Тәбиғәт тә тыуған ерен ярата)*
- Шиғырҙы ниндәй тойғолар менән уҡырға кәрәк?
- Шиғырҙы тасуири уҡырға әҙерләнәбеҙ. Һәр строфала төп мәғәнәне тотҡан һүҙҙәрҙе әйтегеҙ. Мин 1-се юлды уҡыйым, һеҙ 2-се юлды һәм артабан шулай дауам итәбеҙ.
- Шиғырҙы тағын аудиояҙмаға эйәрен уҡығыҙ. *(Аудиояҙма артынан ҡабатлап уҡыу)*
- Бер-берегеҙгә уҡып күрһәтегеҙ. Баһалар ҡуйығыҙ.
- Хәҙер тасуири уҡып күрһәтәбеҙ. Кем үҙенең иптәшен матур уҡый тип уйлай, әйтегеҙ. *(Яҡшы уҡый тип аталған студент тасуири уҡып күрһәтә).*

Һеҙгә шиғыр оҡшанымы? Ҡайһы ваҡытта ошондай шиғырҙар тыуа?

*(Илһамланғанда).*

Тимәк, тәбиғәт беҙҙе илһамландыра. Эстетик зауыҡ тәрбиәләй. Беҙ шиғырҙың эҫәрен уҡыныҡ. Хәҙер үҙегеҙ ҙә «Үләндәр» темаһы буйынса бәләкәй генә текст яҙығыҙ.

5 мин ваҡыт бирелә.

Бер берегеҙгә уҡып ишеттерегеҙ. Баһалар ҡуйығыҙ. Кем үҙенең һөйләмдәрен уҡып күрһәтә? *(Студенттар һөйләмдәрҙе уҡыйҙар).*

Кемдең иншаһы оҡшаны?

Ни өсөн уныһы яҡшыраҡ тип уйлайһығыҙ?

- Сөнки уның телмәре бай. Ҡыҙыҡлы төҙөй белә.
- Шулай итеп тәбиғәт нимәгә булышлыҡ итә?

  *(Яуаптар)*

Хәҙер үҙегеҙгә дөйөм баһа ҡуйығыҙ.

**V Йомғаҡлау.** Дәресте ҡобайыр тыңлау менән тамамлайбыҙ *(«Уралтау» бәйете Слайд-шоу ҡарау.)*

ɦау булығыҙ!

Дәрес өсөн рәхмәт!

**«Йөрәгендә халkы булмағандың**
**Кеше булырға ла хаkы юk»**

***(Р. Ғарипов)***

*Алдан әҙерләнмәгән (импровизациялы) дәрес*

**Маkсат**: залда ултырыусылар менән Р.Ғариповтың шиғри юлдарын анализлау; уларҙы кеше, халыk, йәшәү мәғәнәһе хаkында уйланырға мәжбүр итеү.

*Уkытыусы:*

- ɦаумыһығыҙ!

Ултырығыҙ.

Минең исемем - Кәримова Гөлнара Яхъя kыҙы, Туймазы педагогия колледжында башkорт телен уkытам.

Бөтәгеҙҙе лә әүҙем kатнашырға саkырам.

Дәресте башлайбыҙ. Экранға kарағыҙ (Экранда - ɦыйыр ɦүрәте) Нимә күрәһегеҙ?

*Яуап:* ɦыйыр.

*Уkытыусы*: Хәҙер нимә күрәһегеҙ? (Ике ɦыйыр ɦүрәте).

*Яуап:* Ике ɦыйыр. ɦыйырҙар.

*Уkытыусы:* Ә бында нимә? (Көтөү)

*Яуап:* ɦыйырҙар. Көтөү.

*Уkытыусы:* Ошо көтөүҙе кем тота? Кем таратмай?

*Яуап:* Көтөүсе.

Дөрөҫ! Экранға kарайыk. Кемде күрәһегеҙ? (Кеше ɦүрәте).

*Яуап:* Кешене күрәбеҙ.

*Уkытыусы:* Бында кемдәр? (Ике кеше ɦүрәте)

*Яуап:* Кешеләр. Ике кеше.

*Уkытыусы:* Был ɦүрәттә кем төшөрөлгән?

Ошо сәхнәлә ултырыусылар нисек атала?

*Яуап:* Кешеләр. Халыk.

*Уkытыусы:* Ошо халыkты кем тота? Кем йәки нимә халыkты тарkатмай?

*Яуап:* (төрлө варианттар).

*Уkытыусы:* Әйҙәгеҙ, шул ɦорауға яуап эҙләйек. Халыkты нимә берләштерә?

*Яуап:* - Дөйөм территория.

- Уртаk тарих. Халыk тарихы.

- Милли ғөрөф-ғәҙәттәр.
- Маҡсаттар.
- Дөйөм проблемалар.
- Тел һ.б.

*Уҡытыусы:* Дөрөҫ. (Экранда - «Рух» схемаһы.) Тарих, маҡсаттар, тел, йолалар, әҙәбиәт, тарих – бөтәһе лә **рухты** тәшкил итә. Ысынлап та, халыҡты ошолар берләштерә. **Халыҡты рух тота, таратмай.**




Ә хәҙер әйтегеҙ, һеҙ ниндәй һөнәр кешеләрен беләһегеҙ?

*Яуап:* тракторсы, һауынсы, комбайнсы, тегенсе, ашнаҡсы, уҡытыусы һ.б.

*Уҡытыусы:* Нисек уйлайһығыҙ, улар эшкә барғанда, мин халыҡ өсөн эшләйем, халыҡҡа хеҙмәт итергә эшкә барам, тип уйлаймы икән?

*Яуап:* Юҡ. Улар аҡса эшләй, шул аҡсаға балаларын ашата, кейендерә. Йорт һатып ала һ.б.

(Күбеһенсә ошондай яуаптар әйтелә. Әммә халыҡ өсөн эшләй тип яуап биреүселәр ҙә булырға мөмкин.)

*Уҡытыусы:* Дөрөҫ фекер йөрөтәһегеҙ.

Әммә арағыҙҙа кемдер берәү «Халыҡ өсөн эшләйем тип уйлаусылар ҙа бар,» - тине. Был яуапта ла хәҡиҡәт бар түгелме? Нисек кенә булмаһын, һәр кеше күңеле менән халыҡтың бер тамсыһы икәнен тоя. Әйтәйек, Башҡортостанда йәшәүсе үҙенең ошо республика кешеһе икәнен аңлай. Башҡорт үҙенең милләтен белә һ.б. Ана шул тойғоларҙы үҫтереүсе, рухты ҡоротмаусы кешеләребеҙ бар. Улар – башҡорт зыялылары. Халыҡ бәхете өсөн көрәшкән, улар ғилемле, мәғрифәтле булһын өсөн бөтә көсөн һалғандар ғына шул исемде йөрөтә. Улар ғүмере буйы халыҡҡа хеҙмәт итә. Шуға күрә башҡорт зыялаларының исемдәре онотолмай.

Шул кешеләргә, йәғни зыялыларға, кемдәрҙе индерер инегеҙ? Яуабығыҙҙы иҫбатлағыҙ.

- С. Юлаев.
- М. Аkмулла.
- Ш.Бабич.
- М. Кәрим һ.б. (Яуап биреүселәр үҙ фекерҙәрен иҫбатларға тейештәр)

*Укытыусы:* Бөтәһе лә дөрөҫ. Яҙыусы, шағирҙарҙан башkа һөнәр кешеләре зыялы була аламы? Миҫалдар китереҙ. (Яуаптар)

*Укытыусы:* Афариндар!

Ә мин ошо залда ултырыусыларҙы ла башkорт зыялыларына индерәм.

**Жюри ағзаларын**. Беҙ уларҙың хеҙмәттәрен өйрәнәбеҙ, уларҙан өлгө алабыҙ.

**Укытыусыларҙы.** Улар йәштәргә халkыбыҙ мәҙәниәтен, тарихын, телен өйрәтә. Рухи kиммәттәрен еткерә. Халkыбыҙҙы берләштергән рухты кешеләрҙә тәрбиәләй. (Экрандың өҫкө өлөшөндө – халыk, аҫkы өлөшөндә көтөү төшөрөлгән. Укытыусы һуңғы һөйләмде («Халkыбыҙҙы...») әйткәндә, өҫкө өлөшөнә күрһәтә.)

Халkыбыҙҙың арҙаkлы улы, башkорт зыялыһы, шағир Р.Ғарипов иҫкәртә:

**«Йөрәгендә халkы булмағандың**
**Кеше булырға ла хаkы юk»**

(Укытыусы тәүге юлды үҙе әйтә. Икенсе юлды залға бергәләп дауам итергә kуша. «Кеше булырға ла хаkы юk» һуңғы юлын әйткән мәлдә, указка менән көтөү һүрәтенә күрһәтә. Халыk хаkында уйламаған кеше, тимәк, кеше түгел, ә...)

*Укытыусы:* Ә һеҙ үҙегеҙҙе ниндәй кеше тип уйлайһығыҙ?

(Залда ултырыусылар, конкурсанттар, студенттар яуап бирә.)

*Укытыусы:* Һеҙҙең яуаптарығыҙҙа «халыk», «кеше», «белем биреү», «хеҙмәт итеү» тигән һүҙҙәр йыш яңғыраны. Афариндар!

Хәҙер үҙегеҙҙең фекерҙәрегеҙҙе дөйөмләштереп, синквейн ижад итегеҙ. Синквейн – француз һүҙе, биш тигәнде аңлата. Мәғлүмәт бәйләнешле биш шиғыр юлына теҙелә.

(Экранда был жанрға аңлатма бирелә.)

**Синквейн**

1. Теманы асыkлаусы исем.

2. Предметты баһалаусы ике сифат.

3. Предметkа хас булған өс kылым.

4. Теманың йөкмәткеһен асыусы фраза.

5.Ukытыусының темаға kарата үҙ фекерен бер һүҙ менән сағылдырған һығымта яһаусы исем (резюме).

Ҡулығыҙға ручка, kағыҙ алығыҙ. Беҙ һеҙҙең менән «Кем ул кеше?» һорауына яуап бирәбеҙ. Тимәк, беренсе юлға «Кеше» һүҙен яҙабыҙ. Дауам итегеҙ.

(4 минут вakыт бирелә. Залдағылар уkыйҙар. Баһалау.)

Һеҙҙең иғтибарға тағын бер синквейн тәkдим итәм. Хор менән уkыйыk. (Экранда яҙыла.)

***Кеше.***

***Бай рухлы, илһөйәр.***

***Эшләй, уkый, ярата.***

***Халыkтың киләсәген kайғыртыусы Ватандың улы.***

***Шәхес.***

Афариндар!

**Йомғаkлау.** Бөгөнгө ауыр заманда халыk, рух, тел, киләсәк тип kайғыртып йөрөүегеҙ тик маkтауға ғына лайыk. (Көтөү һүрәтенә күрһәтә)

**Көтөүселе көнгә kалмайыk.**

(Халыk һүрәтенә күрһәтә)

**Йөрөгендә халkы булған кешеләр тәрбиәләйек!** Коллегалар, һеҙ ризаһығыҙмы? Студенттар, һеҙ әҙерләнәһегеҙме? Жюри ағзалары, һеҙ ышанаһығыҙмы?

Рәхмәт. Дәрес бөттө. Һау булығыҙ.

# Файҙаланылған әҙәбиәт


1. Ардаширов А. М. И др. Русский язык. Учебник букварь для I кл. Башкирской школы. - Уфа, 1990г.

2. Биболетов М. З. И др. Английский язык для маленьких. - М.,1994г.

3. Полат С. С. Обучение в сотрудничестве // Ин. яз. В школе. - 2000, №1.

4. Сәйетбатталов Ғ. Г. Башҡорт теле. Ябай һөйләм синтаксисы. -ӨФө, 1999.

5. Толомбаев Х. А. һ.б. Беренсе синыфтың "Бүләк" дәреслегенә методик ҡулланма. - Өфө, 1997.

6. Толомбаев Х. А. һ.б. "Башҡорт теле" дәреслегенә методик ҡулланма. -ӨФө. 1996.

7. Хисаметдинова Ф. Г. И др. Учим башкирский язык. - Уфа, 1997.

10. Шарапов И. Э. Урыҫ мәктәптәренең башланғыс синыфтарында башҡорт телен уҡытыу үҙенсәлектәре. - Өфө, 1997.

11. Программалар 31м д1реслект1р.